Башҡортостан Республикаһы
Ишембай районы
муниципаль район Советы
453200, Ишембай ҡалаһы, Ленин проспекты, 60
тел.: 3-39-28, 4-19-54

Республика Башкортостан
Совет муниципального района
Ишимбайский район
453200, г. Ишимбай, пр. Ленина, 60
тел.: 3-39-28, 4-19-54

**БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ ДҮРТЕНСЕ САҠЫРЫЛЫШ ИШЕМБАЙ РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫ СОВЕТЫ**

**ҠАРАР** **РЕШЕНИЕ**

**Башҡортостан Республикаһы Ишембай районы муниципаль районы Ишәй ауыл Советы ауыл биләмәһе генераль планына үҙгәрештәр индереүҙе раҫлау тураһында**

Ишәй ауыл Советы ауыл биләмәһенең тотороҡло үҫеше өсөн шарттар булдырыу маҡсатында, Рәсәй Федерацияһы ҡала төҙөлөшө кодексының 24-се статьяһына , 2003 йылдың 06 октябрендәге Федераль закон4а - 131-се "Рәсәй Федерацияһында урындағы үҙидара ойошмаһының дөйөм принциптары тураһында"ғы Федераль законға таянып, Башҡортостан Республикаһы Ишембай районы муниципаль районы Уставына, 2017 йылдың 26 сентябренән 3-сө асыҡ тыңлау һөҙөмтәләре буйынса һығымта яһалған 2017 йылдың 26 сентябренән 3-сө һанлы асыҡ тыңлауҙар протоколына ярашлы, Башҡортостан Республикаһы Ишембай районы муниципаль районы Советы **карар итте:**

1.Башҡортостан Республикаһы Ишембай районы муниципаль районы Ишәй ауыл Советы ауыл биләмәһе генераль планына түбәндәге үҙгәрештәр индереүҙе раҫларға:

- 02:28:070401:101 кадастр номерлы ер участкаһын (рөхсәт ителгән файҙаланыу – ауыл хужалығы производствоһы өсөн, майҙаны – 46000 кв.м) ауыл хужалығы тәғәйенләнеше ерҙәре категорияһынан сәнәғәт, энергетика, транспорт, элемтә, радиотапшырыуҙар, телевидение, информатика, космик эшмәкәрлекте тәьмин итеү өсөн ерҙәр, оборона, хәүефһеҙлек ерҙәре һәм башҡа махсус тәғәйенләнештәге ерҙәр категорияһына күсереүҙе планлаштырыу менән бәйле, был ер участкаһының функциональ тәғәйенләнешен зыяратты урынлаштырыу өсөн файҙаланыу маҡсатында үҙгәртергә.
- 02:28:070903:166 кадастр номерлы ер участкаһын (майҙаны 363 кв.м) ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ер категорияһынан , төҙөлөш сәнәғәте өсөн (төҙөлөш материалдары производствоһы) файҙаланыу маҡсатында , сәнәғәт, энергетика, транспорт, элемтә, радиотапшырыу, телевидение, информатика, космик эшмәкәрлекте тәьмин итеү өсөн ерҙәрҙе, оборона, хәүефһеҙлек һәм башҡа махсус тәғәйенләнештәге ерҙәр кагегорияһына күсереү планлаштырылыуы менән бәйле.

2.Башҡортостан Республикаһы Ишембай районы муниципаль районы Ишәй ауыл советы ауыл биләмәһе генераль планын индерелгән үҙгәрештәр менән Башҡортостан Республикаһы Ишембай районы муниципаль районы Ишәй ауыл советы ауыл биләмәһе хакимиәтенең рәсми сайтында урынлаштырырға (http://isheevo.ru)

3. Ҡарарҙы үтәүгә контролде Башҡортостан Республикаһы Ишембай районы муниципаль районы Советының аграр һорауҙар, ерҙе һәм тәбиғәт ресурстан файҙаланыу, экология һәм ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса даими комиссияға йөкмәтергә (рәйесе Козырев Н.Н.)

4. Ҡарарҙы “Восход” гәзитендә, Интернет селтәрендә Башҡортостан Республикаһы Ишембай районы муниципаль районы Советының рәсми сайтында баҫтырырға. (http://sovet.ishimbaimr.ru).

Совет рәйесе О.М. Агафонов

Ишембай ҡ.

08 август 2019 й.

№34/433